*Зөһрә КАМАЛОВА*

Нефтселәр мәҙәниәт һарайындағы «Ләйсән» балет студияһына Алһыуҙы әсәһе алып килде. Үҙенең ошонда ижад донъяһына аяҡ баҫыуы менән ғорурлана ул. Оло сәхнәгә илткән тәүге бейеүҙәрҙе, балеттарҙан вариацияларҙы уның өсөн студия етәксеһе Хашим Фатих улы Мостаев ҡуйҙы.

— Хашим Фатихович мине сәнғәт донъяһына алып инеүсе булды. Хореография училищеһына уҡырға барырға ла ул кәңәш итте, — тип хәтерләй бейеүсе. — Артабан иһә оҫталыҡ серҙәренә төшөнөүҙә танылған балерина Фирҙәүес Нафиҡова, Ф.Ғәскәров исемендәге ансамбль солистары Марат Кәримов, Земфира Ғәбделхаҡова һ.б. ярҙам итте.



Шуны ла әйтергә кәрәк, хореография училищеһын тамамлағас, Алһыуҙы бейеү ансамбленә генә түгел, башҡа бик күп коллективтарға саҡыралар, остаздары иһә Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа артабан уҡырға барырға кәңәш бирә. Шулай ҙа Алһыу Башҡорт дәүләт бейеү ансамблен һайлай. Бейеү өсөн генә донъяға тыуған тиерһең, ансамбль репертуарында булған күп бейеүҙәрҙә ҡатнаша ул, бөтә яңғыҙ бейеүҙәрҙе үҙенә генә хас мөләйемлек, оҫталыҡ һәм наҙ ҡушып башҡара. Ә тәүге остазы Х.Ф.Мостаев ҡуйған «Сәскә атҡан ҡурай» бейеүен тамашасылар айырыуса йылы ҡабул итте.

Ансамблдең йөҙөк ҡашы булған «Дуҫлыҡ», «Бөрйән ҡыҙҙары», «Ҡумыҙ менән бейеү», «Шаяндар» һ.б. бейеүҙәр менән Башҡортостан, Рәсәй тамашасыларын ғына түгел, Ер шарының төрлө ҡитғаларындағы илдәр халҡын да әсир итте Алһыу.

Унды, бик унды Алһыу ансамблгә килеп. Бер йыл эшләгәс тә уны сит илдәргә гастролгә алып киттеләр. Уның оҫта бейеүенә Венгрия, Израиль, АҠШ, Канада, Голландия, Франция, Бельгия, Австрия илдәренең талапсан тамашасылары ихлас алҡышланы. Шулай ҙа Латин Америкаһы һәм Канадала үткән халыҡ-ара фестивалдәрҙә сығыш яһауы айырыуса иҫтәлекле Алһыу өсөн. Юғары кимәлдә ойошторолған был фестивалдә 24 илдең профессиональ фольклор ансамблдәре ҡатнашты. Тамашасыларҙың башҡорт бейеүҙәрен ҡабат-ҡабат һорап бейетеүе, милли кейемдәрҙе иҫтәре китеп, һоҡланып ҡарауҙарын оноторлоҡмо һуң ?!

— Беҙ фестивалдең йондоҙо булдыҡ, тиһәм һис тә арттырыу булмаҫ, — ти Алһыу. — Был яуаплы сәйәхәттә мин беренсе тапҡыр «Дуҫлыҡ» һәм «Бөрйән ҡыҙҙары»нда бейенем. Лауреат исемен яулап, халҡыбыҙҙың оло ышанысын аҡлап ҡайттыҡ.

Алһыу Шәфиғуллинаның репертуарында донъя халыҡтары бейеүҙәре лә байтаҡ: татар, рус, испан, йәһүд, коряк, ингуш, Үҙәк һәм Латин Америкаһы халыҡтары бейеүҙәренең һәр береһен үтә бер нәфислек менән башҡара ул.

Танылған бейеүсе музыканы, айырыуса етди музыканы үҙ итә, классик әҙәбиәтте, журналдарҙа сыҡҡан яңы әҫәрҙәрҙе яратып уҡый. Ғөмүмән, сәнғәт кешеһе үҙ һөнәре буйынса ғына түгел, һәр яҡлап үҫешкән булырға тейеш, тип иҫәпләй Алһыу.

— Киләсәктә өр-яңы бейеүҙәр сәхнәгә ҡуйылыр һәм мин күмәк һәм яңғыҙ бейеүҙәрҙе тағы ла үҙенсәлеклерәк итеп башҡарырмын тип ниәтләнәм, — ти бейеүсе. — Айырыуса һәр бейеүсе өсөн яңғыҙ бейеүҙәр куберәк ҡуйылһын ине, сөнки был осраҡта артистың таланты тағы ла тулыраҡ асыла. Фәйзи Ғәскәров үҙенең ансамблен «бейеү театры» булараҡ төҙөгән һәм был исемде аҡлау беҙҙең бурыс ул.

Ф.Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле солисткаһы, Башҡортостандың халыҡ артисткаһы Алһыу Шәфиғуллинаның ижады сәскә атҡан мәл. Сәнғәт күгенең йондоҙо булып оҙаҡ янһаң ине, Алһыу!